*Приложение 1*

**Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение Озеркинская средняя общеобразовательная школа муниципального района Караидельский район Республики Башкортостан**

# Контрольно-измерительные материалы по башкирскому языку для 1-9 классов

***Составитель: Учитель башкирского языка***
***Давлятшина Айгуль Финатовна***
***Высшая квалификационная категория***

***2023***

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары:**

Яҙма эштәрҙең киң ҡулланыла торған түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә була:

-һүҙҙәрҙе, типик фраза һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу;

-һүҙлек диктанты;

-ғәҙәти диктанттар;

-һорауҙарға яуаптар яҙыу;

-изложениелар;

-иншалар;

**Контроль күсереп яҙыу**

Контроль күсереп яҙыу бер генә билдә менән баһалана. “5” билдәһе – тупаҫ булмаған 2 орфографик,2 пунктуацион хата булған эшкә, “4” билдәһе 3 орфографик, 3 пунктуацион йә 2 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 6 орфографик хатаһы булған эшкә лә “4” билдәһе ҡуйырға мөмкин. “3” билдәһе 8 орфографик, 6 пунктуацион йә 5 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла.

## 2-се класс

**№1**
**Контроль күсереп яҙыу**
**Тыуған ил.**

Тыуған илебеҙ бай һәм матур. Унда киң далалар һәм бейек тауҙар бар. Илемдә тәрән диңгеҙҙәр, күл-дәр һәм йылғалар күп. Үҫемлектәр һәм ағастар үҫә. Төрлө ҡоштар һәм йәнлектәр йәшәй. Илебеҙ ҙур ҙа, матур ҙа! *(33 һүҙ.)*

**№2**
**Контроль күсереп яҙыу**

**Ҡышҡы төн.**

Төн. Тышта саф һауа, тыныс. Ябалаҡлап ҡар яуа. Ул ер өҫтөнә ҡупшы балаҫ булып йәйелә. Эйтерһең дә, миңә аҡ юл, бәхеттәр теләй. Минең ошо матур төндә ҡанатланый алыҫҡа осҡом, тирә-яҡтың матурлығын байҡағым килде. *(34 һүҙ.)*

**№3**
**Контроль күсереп яҙыу**

**Март.**

Март етте. Зәңгәр күктә ҡояш ялтырай. Ул һалҡын ергә үҙенең йылы нурҙарын һирпә. Иртәле-кисле әсе ел иҫә. Марттың үткер еле ҡарҙы белендермәй генә иретә. Ҡыу ағас ботаҡтарында турғайҙар сырылдаша. Көньяҡтан ҡоштар ҡайта башлай, *(34 һүҙ)*

**№4**
**Контроль күсереп яҙыу**

**Май.**

Май етте. Йылы көндәр башланды. Бөтә ер йәшәрҙе. Болондар төрлө сәскәләр менән ҡапланды.Туғайҙа муйыл аҡ сәскәгә төрөндө. Уның хуш еҫе бөтә ергә тарала. Бөҙрә талдар араһында ҡоштар һайраша. Таңдарын һандуғас тауышы тынмай. Майҙың иң йәмле көндәре килеп етте. (39 *һүҙ.)*

# 3-сө класс

**№1**
**Контроль күсереп яҙыу**
**Дуҫтар.**
Азаттың ҡулы шеште. Ул мәктәпкә бара алманы. Әсәһе эштә. Азат яңғыҙ. Дәрестән һуң дуҫтары килде. Ғәлиә иҙән йыуҙы. Хәлил утын ташыны. Айгөл һыу килтерҙе. *(24 һүҙ.)*

**№2**
**Контроль күсереп яҙыу**
**Ҡупшы сана.**
Айҙарҙың атаһы тимерсе. Ул уға сана яһап бирҙе. Сана шәп килеп сыҡты. Малайға ул бик оҡшаны. Айҙар уны йәшелгә буяп ҡуйҙы.
Ҡыш килде. Малай көндә тауға сана шыуырға барҙы. Уның ҡорос аты шәп елдерә! *(34 һүҙ.)*

**№3**
**Контроль күсереп яҙыу**
**Юл япрағы.**
Юл япрағы - дарыу үләне. Уны яраға ябалар. Ул юл буйында осрай. Үләндең япраҡтары ергә һырығып үҫә. Үҙҙәре ҡаты, сыҙамлы. Шуға аяҡ табаны, тәгәрмәс ҡурҡыныс түгел. Орлоҡтары аяҡтарға эйәреп тарала. Үҫемлек юл буйында үҫә. Шуға ла юл япрағы тип атала. *(39 һүҙ.)*

**№4**
**Контроль күсереп яҙыу**
**Май.**
Май етте. Йылы көндәр башланды. Бөтә ер йәшәрҙе. Болондар төрлө сәскәләр менән ҡапланды.
Туғайҙа муйыл аҡ сәскәгә төрөндө. Уның хуш еҫе бөтә ергә тарала. Бөҙрә талдар араһында ҡоштар һайраша. Таңдарын һандуғас тауышы тынмай. Май-ҙың иң йәмле көндәре килеп етте. *(39 һүҙ.)*

# 4-се класс

**№1**
**Контроль күсереп яҙыу**

**Минең йортом**

Беҙҙең ауыл урман араһында урынлашҡан. Беҙҙең атайҙарыбыҙ һәм ағайҙарыбыҙ урман хужалығында эшләйҙәр. Уҡыусылар урманды һаҡлауҙа әүҙем ҡатнашалар. Ҡырҡылған урман урынына ҡарағай, шыршы ағастары ултыртабыҙ. Урманды ҡороған ботаҡтарҙан һәм япраҡтарҙан таҙартабыҙ. Көҙ көнө ағас орлоҡтары йыябыҙ. Орлоҡтарҙы посылка менән мәктәптәргә ебәрәбеҙ. Был эштәребеҙ өсөн беҙгә урман хужалығы эшселәре рәхмәт әйтәләр, бүләктәр бирәләр.

**№2**
**Контроль күсереп яҙыу**

**Йыл миҙгелдәре. Көҙ**

Сентябрь, октябрь, ноябрь – көҙ айҙары. Көҙ көндәр ҡыҫҡара, төндәр оҙая. Ҡайын, йүкә, саған ағастары япраҡтарын ҡоялар. Тәүлекләп, аҙналап ямғырҙар яуа. Һалҡын елдәр иҫә. Ҡоштар йылы яҡтарға китәләр. Беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар ғына ҡала. Ҡуяндар, тейендәр һәм башҡа йәнлектәр йөндәрен алыштыралар. Баҫыуҙарҙа уңыш йыйыу тамамлана. Көҙ аҙағында төньяҡтан беҙгә ҡыҙылтүштәр осоп киләләр.

**№3**
**Контроль күсереп яҙыу**

**Яҙғы каникулда.**

Быйыл ҡыш бик һалҡын булды. Тик яҙғы каникулда ғына көндәр бер аҙ йылынды. Беҙ бер аҙна ял иттек. Был ваҡытты бушҡа үткәрмәнек. Ҡар иреүен, йылғала боҙ китеүен, ағастарҙың бөрөләнеүен күҙәттек. Башта ҡар аҡрын ирене. Төндә, иртәнсәк һәм кистәрен һыуыҡ булды. Аҙаҡ туңдырмай башланы.

Каникул көндәрендә беҙҙең мәктәптең ике уҡыусыһы район үҙәгендә слетта булып ҡайтты. Беҙ бергәләп кино ҡараныҡ, ата-әсәләргә концерт күрһәттек, китаптар уҡыныҡ.Каникул күңелле үтте. Хәҙер яңы көс менән уҡый башланыҡ. Беҙ бөтәбеҙ ҙә яҡшы уҡыйбыҙ.

**№4**
**Контроль күсереп яҙыу**

**Джинсы**

Джинсы – кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән тығыҙ салбар. Уны Леви уйлап табып, эш кейеме итеп 1853 йылда беренсе тапҡыр донъяға сығарған. Тарихсыларҙың мәғлүмәттәре буйынса, тағы ла итальян матростары ҡаты киндер салбар кейгән. Ул елкән тегеү өсөн елкәнле флот туҡымаһы булған.

“Ыштан булһа, шундай булһын” - тип әйткән Дженес. Генуя ҡалаһында итальян һүҙенән килеп сыҡҡан был исем. Унда елкән тегеү өсөн туҡыма етештергәндәр.

Шулай уҡ калын һәм ҡаты кизе-мамыҡтан яһалған туҡыманы Американың Техас штатындағы көтөүселәр (ковбойҙар) кейгән. Һуңынан ул махсус эш кейеме булараҡ ҡулланылған.

Ә хәҙер джинсы бөтә төр халыҡтың төп һәм модалы кейеменә әүерелде.

# 5-се класс
## №1 Контроль күсереп яҙыу

**Ҡурай моңо.**

Ҡайҙандыр ҡурай моңо ишетелә. Моң йөрәктәргә үтеп инә. Ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә, йылғалар ҙа тынған. Ағастар әкрен генә тирбәлеп ойоп ултыра. Урман сәскәләре лә ошо тәьҫиргә бирелгән. Улар хатта тын алыуҙан да туҡтаған кеүек.

Ә һеҙ, балалар, ҡурай моңон тыңлағанығыҙ бармы?

## №2
## Контроль күсереп яҙыу

**Иртән**

Һоҡланғыс йәйге иртә. Ҡыҙарып сыҡҡан ҡояш нурҙарында, һарғылт йәшел төҫкә инеп, әкрен генә томан күтәрелде. Күҙ яуын алып, үлән баштарында ысыҡ емелдәй, әйтерһең дә, аяҡ аҫтына һанһыҙ ынйы бөртөктәре һипкәндәр. Тәбиғәт әкренләп йоҡонан уяна. Ҡайҙалыр алыҫта һайыҫҡан шыҡырлағаны ишетелде. Уға яуап ҡайтарғандай, ике тапҡыр кәкүк тә саҡырып ҡуйҙы.

Туғайҙан һандуғас йыры ишетелде. Шуны ғына көткәндәй, таллыҡта турғайҙар сутырлаша башланы. Бар тереклеккә ҡыуаныс һәм өмөт биреп, яңы яҡты көн тыуҙы.

## №2
## Контроль күсереп яҙыу

**Ғинуар**.

Ғинуарҙа яңы йыл башлана. Ғинуар – беҙҙең Башҡортостанда иң һыуыҡ ай. Ыжғыр буранлы көндәр күп була. Әсе ел һыҙғыра, төндәрен ул олой, ҡоторона.

Селдәр, ҡорҙар, һуйырҙар ҡалын ҡар аҫтына күмелгәндәр. Улар сатлама һыуыҡтарҙың уҙғанын көтәләр. Тик һайыҫҡандар, турғайҙар ғына көслө һыуыҡтарҙа ла соҡсоналар. Улар кеше йәшәгән урындарҙан аҙыҡ эҙләйҙәр. Ябалаҡ үткер күҙҙәре менән ҡар өҫтөн күҙәтә. Ҡар аҫтындағы өңөнән сыҡҡан сысҡанды һағалай.

## №4
## Контроль күсереп яҙыу

**Янғантау.**

Республикабыҙҙың Салауат районында Янғантау шифаханаһы урынлашҡан.

Унда ер аҫтынан бер туҡтауһыҙ эҫе пар һәм газ сығып ята. Тау 200 йылдан ашыу ғалимдарҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итә, ләкин әлегә тиклем уның сере асылғаны юҡ.

Янғантау шифаханаһында быуын ауырыуҙарын дауалайҙар. Тау янында Ҡорғаҙаҡ йылғаһы аға. Был шишмә ҡышын да туңмай. Ундағы һыуҙың температураһы йыл әйләнәһенә 16-18 градус була. Һыуы шифалы: ашҡаҙан- эсәк һәм бөйөр ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланыла.

# 6-сы класс

**№1 Контроль күсереп яҙыу**

**Ҡурай моңо.**

Ҡайҙандыр ҡурай моңо ишетелә. Моң йөрәктәргә үтеп инә. Ҡоштар ҙа, йәнлектәр ҙә, йылғалар ҙа тынған. Ағастар әкрен генә тирбәлеп ойоп ултыра. Урман сәскәләре лә ошо тәьҫиргә бирелгән. Улар хатта тын алыуҙан да туҡтаған кеүек.

Ә һеҙ, балалар, ҡурай моңон тыңлағанығыҙ бармы?

**№2 Контроль күсереп яҙыу**

**Ҡыш башы.**

Ҡарағайлыға ҡыш ҡапыл килде. Кис ваҡ ҡына ямғыр яуып торҙо. Ел һалҡын түгел ине.

Төндә һыуытып ебәрҙе. Дымлы ер өҫтө шаҡырлап туңды. Төньяҡтан һалҡын ел иҫте. Ул көсәйҙе, ас бүре кеүек олоно.

Таң алдынан буран күтәрелде. Ер менән күк бергә тоташҡандай булды. Хатта күрше йорттарҙы ла күрерлек түгел ине.

Кешеләр аптырап ҡалды. Ярты метрҙан артыҡ ҡар яуған, һырындылар өйөлгән. Бына шулай ҡыш башланды.

(65һүҙ)

**№3 Контроль күсереп яҙыу**

**Ғинуар.**

Ғинуарҙа яңы йыл башлана. Ғинуар – беҙҙең Башҡортостанда иң һыуыҡ ай. Ыжғыр буранлы көндәр күп була. Әсе ел һыҙғыра, төндәрен ул олой, ҡоторона.

Селдәр, ҡорҙар, һуйырҙар ҡалын ҡар аҫтына күмелгәндәр. Улар сатлама һыуыҡтарҙың уҙғанын көтәләр. Тик һайыҫҡандар, турғайҙар ғына көслө һыуыҡтарҙа ла соҡсоналар. Улар кеше йәшәгән урындарҙан аҙыҡ эҙләйҙәр. Ябалаҡ үткер күҙҙәре менән ҡар өҫтөн күҙәтә. Ҡар аҫтындағы өңөнән сыҡҡан сысҡанды һағалай.

**№4 Контроль күсереп яҙыу**

**Алда йәй.**

Йәй көнө һеҙ, балалар, һис шикһеҙ урманда булмай ҡалмайһығыҙ. Урман һеҙҙе саф һауаһы, ҡоштар һайрауы менән ҡаршы алыр, тәмле еләктәре менән һыйлар, рәхәтләнеп ял итергә мөмкинлек бирер. Һеҙ ҙә урмандың дуҫы булығыҙ.

Тәбиғәткә бер ҡасан да зыян килтермәгеҙ. Сәскәләрҙе өҙмәгеҙ, бөжәктәрҙе тотмағыҙ, ҡош ояларын, ҡырмыҫҡа иләүҙәрен туҙҙырмағыҙ, шишмә, ҡоҙоҡтарҙы бысратмағыҙ. Был турала башҡаларға ла әйтегеҙ.

(55 һүҙ.)

# 7-се класс

## №1 Контроль күсереп яҙыу

**Ҡара алтын.**

Нефтте халыҡ алтын менән сағыштыра. Былюҡҡа ғына түгел. Нефттән төрлө нәмәләр эшләнә. Бензин, кәрәсин, мазут кеүек яғыулыҡ майҙарынан тыш, унан ер ашлау өсөн химикаттар ҙа алына. Беҙҙең күлдәк, костюм, кофта һәм ойоҡтарға ла нефттән алынған ептәр ҡушыла.

Башҡортостандың көнбайыш һәм төньяҡ райондарында нефть ятҡылыҡтары табылды. Ҡаланың тирә-яғында нефть вышкалары һәм газ факелдары күп. Был ҡаланы, нефть һәм Кама йылғаһына арнап, Нефтекама тип атанылар.

(75 һүҙ)

## №2 Контроль күсереп яҙыу

**Шәжәрә.**

Шәжәрә – ырыу тарихының йылъяҙмаһы. Башҡорттарҙа борон-борондан ырыу шәжәрәһен яҙыу һәм уны һаҡлау йолаһы йәшәгән. Шәжәрәгә ырыуҙың ирҙәр исеме генә индерелгән һәм уларҙы иҫтә тотоу талап ителгән. Нәҫел-ырыу тураһындағы мәғлүмәттәр ныҡлы һаҡланылған, быуындан быуынға аманат рәүешендә ҡалдырыла килгән.

Үҙеңдең шәжәрәңде белеү ғәҙәте башҡорттарҙа бик борондан һаҡланып килгән, элек 7 быуыныңды белеү ғәҙәти хәл булған. Хатта ата-бабаларын 10-12 быуынға тиклем белеүселәр бар.

Халыҡ тарихын өйрәнеүҙә шәжәрәләрҙең әһәмиәте бик ҙур.

(68 һүҙ)

## №3 Контроль күсереп яҙыу

**Ағиҙел**

Ағиҙел – республикабыҙҙың иң ҙур йылғаһы. Урал тауы итәгенән башланып, ул Башҡортостан аша 1400 километр самаһы ер үтә һәм бик күп ваҡ йылғаларҙың һыуын үҙенәйыя. Ағиҙел буйында Белорет, Күмертау, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө ҡалалары теҙелгән.

Ағиҙелдә иген, ағас, нефть һәм пассажирҙар тейәгән ҙур пароходтар, теплоходтар, баржалар, катерҙар йөрөй. Йылғаның аҡ тулҡындарына, бейек ҡаяларына, унда үҫкән ҡалын урмандарына, йәшел туғайҙарына һоҡланмаған кеше юҡ. Бына ниндәй ул йылғалар әсәһе Ағиҙел!

(71 һүҙ)

## №4 Контроль күсереп яҙыу

**Халыҡ хаҡ һөйләй.**

Аҙ һөйлә, күп тыңла. Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ. Һүҙҙе бирә лә бел, үтәй ҙә бел. Ике уйла, бер һөйлә. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ. Балтаһыҙ урманға барма. Батырлыҡ яуҙа беленер, мәргәнлек ауҙа беленер. Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама. Һүҙеңдең башынан элек төбөн уйла. Башлай белһәң, бөтөрә бел, ала алһаң, бирә бел. Кисеү күрмәй, итек сисмә. Ҡулың күтәрә алмаҫлыҡ суҡмарҙы биленә бәйләмә. Ялған һөйләһәң – тотолорһоң, дөрөҫ һөйләһәң – ҡотолорһоң.

(69 һүҙ)

# 8-се класс

**№1 Контроль күсереп яҙыу**

**Ысын дуҫлыҡ.**

Ҡоштар ҙа оҙон ҡышҡа ныҡлап әҙерләнә. Бүрекле беснәкте генә алайыҡ. Ҡуңыҙ, үрмәксе, бойҙай, еләк – бөтәһен дә йыя. Тик уның аҙыҡ-түлек туплау өсөн махсус һаҡлағысы юҡ. Ләкин ҡош аптырап ҡалмай. Һәр ағас һайын ярыҡ – бына һиңә меңәрләгән “келәт”. Бүрекле беснәк тапҡан һәр нәмәһен шунда йәшерә бара.

Бүрекле беснәктәр бер-береһе менән бик дуҫ. Йыйған ризыҡтарын бергәләп ашай улар. Аҙыҡ туплаған ағасты билдәләп тормайҙар. Кемдекен табып ашаһаң да ярай, тип уйлайҙарҙыр, күрәһең. Берәү бөтәһе өсөн тырыша, бөтәһе берәү өсөн көс түгә. (80 һүҙ.)

**№2 Контроль күсереп яҙыу**

Һаулыҡ.

Тәбиғәт косағында бер ҡурҡыныс булыуын иҫегеҙҙән сығармағыҙ, ул-талпан.

Талпандың ҡайһы берҙәре энцефалит йоҡтора. Әгәр ул тәнегеҙгә ҡаҙалып өлгөрһә, ул урынға тәүҙә май йәки вазелин, йә кәрәсин, дегет, бензин һөртөгөҙ. 5-10 минуттан бөжәк тонсоға башлағас, уны һаҡ ҡына тартып сығарығыҙ. Урынын спирт, одеколон йәки йод менән эшкәртегеҙ.

Энцефалитты иҫкәртеү сараһын күрергә кәрәк. Вакцинаны ноябрь, декабрь айҙарында уҡ поликлиникала яһатырға була.

**№3 Контроль күсереп яҙыу**

Ағиҙел.

Ағиҙел- республикабыҙҙың иң ҙур йылғаһы. Урал тауы итәгенән башланып, ул Башҡортостан аша 1400 километр самаһы ер үтә һәм бик күп ваҡ йылғаларҙың һыуын үҙенә йыя. Ағиҙел буйында Белорет, Күмертау, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө ҡалалары теҙелгән.

Ағиҙелдә пароходтар, теплоходтар, баржалар, катерҙар йөрөй. Йылғаның аҡ тулҡындарына, бейек ҡаяларына һоҡланмаған кеше юҡ. Бына ниндәй ул йылғалар әсәһе Ағиҙел!

**№4 Контроль күсереп яҙыу**

Ҡош юлы.

Бик борон булған был хәл. Ул саҡта әле йондоҙҙар ҙа, Ҡош юлы ла яралмаған, ти. Ҡайҙандыр алыҫтан, көньяҡтан, Урал тауы, Һаҡмар, Ағиҙел йылғалары буйҙарына торналар килеп йәйләр булған.

Бер йылды торналар йылы яҡҡа осҡан ваҡытта, ел-дауыл ҡупҡан. Бала торналар аҙаша, ҡайһылары арып, ергә төшә башлаған. Шул саҡ оло торналар, ҡалғандарына юл күрһәтең өсөн, ҡауырһындарын күк йөҙөнә сәскән. Улар йондоҙға әйләнгән. Торналар осҡан юлда ана шулай йондоҙҙар барлыҡҡа килгән. Ҡош юлы исеме шунан ҡалған. Рустар Ҡош юлын Млечный путь тип исемләгән. Уға хикәйәт тә сығарған. (85 һүҙ.)

# 9-сы класс

## №1 Контроль күсереп яҙыу

***Октябрь.***

Октябрь – көҙҙөң беренсе һыуыҡ айы. Әсе елдәр иҫә. Иртәнге һыуыҡтар көсәйә төшә. Күләүектәр таңғаса боҙ менән ҡапланған була. Йыш яуған һалҡынса ямғырҙар арҡаһында октябрҙе халыҡта “батҡаҡ айы” тип тә атайҙар. Тәүге ҡар яуа, ләкин ул шунда уҡ ирей. Ҡайһы бер йылдарҙа ҡар ятып та ҡуя.

Күлдәр, быуалар туңа башлай. Иң аҙаҡҡы күсмә ҡоштар китеп бөтә. Иң һуңғы булып сәүкәләр, өйрәктәр китә. Уларға алмашҡа ҡыҙылтүштәр, беҙҙең яҡтарҙа ҡышлаусы бүтән ҡоштар килә. Ныҡлап һыуыҡ төшөү менән, айыу, бурһыҡ, алйырҙан йоҡоға тала. Телмәрйендәр ҙә йоҡоға китә.

Баҡсаларҙа ағас ултыртыу дауам итә. Япраҡтар тулыһынса ҡойолоп бөтә.

## №2 Контроль күсереп яҙыу

***Көн исемдәре.***

Билдәле булыуынса, көн исемдәрен башҡортса дүшәмбе, шишәмбе, шаршамбы, кесаҙна, йома, шәмбе, йәкшәмбе тип атайҙар. Был һүҙҙәр нимә аңлата һуң? Бына уларҙың мәғәнәләре: йәк, дү, ши, шар ҡушымталары – бер, ике, өс, дүрт һандарының исемдәре. Ә шәмбе – “көн” тигәнде аңлата икән. Фарсылар шул һандарға шәмбе һүҙен ҡушып, аҙна көнө исемдәрен яһаған. Шулай итеп, йәкшәмбе – беренсе көн, дүшәмбе – икенсе көн, шишәмбе – өсөнсө көн, шаршамбы – дүртенсе көн. Кесаҙна һүҙенә фарсылар дини мәғәнә һалған. Уны кесе йома тип тә әйтәләр. Ул намаҙға йыйылыу көнө тигәнде аңлата. Йома һүҙе аҙна мәғәнәһен бирә. Аҙна һүҙе фарсы телендә етене белдерә.

## №3 Контроль күсереп яҙыу

***Ҡоштарҙы ашатығыҙ.***

Урмандарҙа,баҡсаларҙа зарарлы бөжәктәрҙе таҙартыусы ҡоштар араһында ҡарабаш турғайҙан да егәрлеһе юҡтыр.Орнитологтарҙың иҫәпләүҙәренә ҡарағанда,бала үҫтергән саҡта ҡарабаш турғайҙарҙың бер ояһы ғына ла көн һайын меңләгән ҡаршылауыҡты юҡ итә.

Ҡыш етеп,көндәр һыуына башлағас,ҡарабаш турғай урмандан кеше йәшәгән тирәгә күсә.Бында аҙыҡ табыуы еңелерәк.

Ҡошсоҡ һалҡынға сыҙамлы.Уны аслыҡ ҡына һәләк итә.Ас булһа,өшөй ҙә,аҙыҡ эҙләргә хәле ҡалмай.Ҡайһы бер райондарҙа яҙ етеүгә уларҙың яртыһы ғына ҡалған була.Ә ҡыш бик һыуыҡ булһа,ундан бере генә ҡышлап сыға.

Балалар, ҡоштарға ярҙам итегеҙ!Улар-беҙҙең ярҙамсыларыбыҙ,дуҫтарыбыҙ.

Уларҙы эйәләштерегеҙ,ашатығыҙ!(*И.Заянчковский*).

## №4 Контроль күсереп яҙыу

**Июнь.**

Июнь-йылдың иң матур айы. Болон , туғайҙар гөрләп сәскә ата. Был айҙа Өфө ҡалаһына яҡын аҡландарҙа ҡырҡтан ашыу сәскә төрөн күрергә мөмкин. Йылға,күлдәр өҫтөн ап-аҡ һәм һап-һары томбойоҡ сәскәләре ҡаплай.

Май, июнь-ҡоштарҙың бала сығарыу ваҡыты. Улар балаларына ашарға ташып бер була. Мәҫәлән,бәләкәй генә себен сәпсеге тәүлегенә 560 тапҡыр осоп, аҙыҡ килтерә. Июндә күбәләктәр оса. Бал ҡорто күс айыра. Июнь-тәүге еләктәр айы. Иң тәүҙә ҡайын еләге бешә.

22 июнь - йыл эсендә иң оҙон көн һәм иң ҡыҫҡа төн. Бер нисә көн шулай тигеҙ тора, шунан йәйге көн ҡыҫҡара башлай. (92һүҙ) (“Йәншишмә”гәзитенән).